Бөтә илдәрҙең пролетарийҙары, берләшегеҙ!

Эҙемгәт БАЙРАҒЫ

Газета 1931 йылдың 1 ноябренән сыға

Башҡорт АССР-ы КПСС-тың Хәйбулла район комитеты һәм халыҡ депутаттарының район Советы органы

№ 110 (6393) 1987 йыл, 15 сентябрь, шишәмбе Хаҡы 3 тин.

КОНТРОЛЬНЫЙ ЭКЗЕМПЛЯР

Урак-87

КҮРШЕЛӘРГӘ ЯРҘАМҒА

Игенселәргә, бигерәк тә райондың урман зонаһында урынлашҡан хужалыҡтарға быйылғы ураҡ бик ауырға тура килә. Ҡағиҙә булараҡ, бында һауа шарттары ҡаршаһында яҙғы сәсеү тоҡсарлана, ашлыҡ та һуңлап өлгөрә. Бында һәйбәт иген үҫтерелгән, һәм хәҙер уны юғалтыуһыҙ йыйып алыу төп бурыс булып тора.

«Красное знамя» колхозы эшсәндәренә ошондай ҡатмарлы һауа шарттарында «Таналыҡ» совхозы механизаторҙары ярҙам күрһәтәсәк.

Кисә, комбайндарын игенде туранан-тура сабыуға үҙгәртеп ҡороп, биш комбайн ярҙамға китте. Совхоздың алдынғы комбайнерҙары коммунист Әнүәр Теүәлбаев, шулай уҡ Дауыт Әхтәмов, Камил Кирәев, Анатолий Ярмаҡ һәм Ильяс Ишбулатовтар «Красное знамя» колхозы баҫыуҙарына килде. Хужалыҡтың Новопетровка бригадаһында уларға йәшәү урыны әҙерләнгән, дөйөм туҡланыу ойоштороласаҡ.

Совхоздың тағы ла бер нисә механизаторы ошо колхозға килергә әҙерләнә.

Был бик ваҡытлы ярҙам. Колхоз етәкселегенә уны белеп файҙаланырға кәрәк. Эште ойоштороу йәһәтенән бер ниндәй ҙә тоҡсарлыҡ булырға тейеш түгел.

В. ДАНИЛОВ.

ЭШ ТУҠТАТЫЛМАЙ

Быйылғы ураҡ Ленин исемендәге колхоз игенселәре өсөн бигерәк тә ҡыйынға тура килде: хужалыҡта бөтә эштәр тоҡсарлана, йыш яуған ямғырҙар ҡамасаулай. Был колхоз етәкселәре һәм белгестәрен бик борсой, Сөнки мәжбүри юғалтыуҙарға сик ҡуйып булмай. Күп иген яҫмаларҙа ята, улар ҡойола һәм шыта башланы.

Механизаторҙар көндәрҙең аяҙайыуын көтөп, башҡа төрлө мөһим эштәр башҡара. Мәҫәлән, бөгөнгө көндә колхоз баҫыуҙарында алты силос йыйыу комбайны ҡуҡуруз сабыуҙа ҡатнаша.

Ивановка бригадаһынан механизатор Рәсүл Солтанов алда килә, ул КПКУ-10 агрегатында 27094 центнер ҡуҡуруздың йәшел массаһын сапты. Шоферҙар Ғилман Илбаков, Фаил Дәүләтбирҙин, Ирек Торомтаевтар баҫыуҙан траншеяға 429—602 тонна йәшел масса ташып, юғары хеҙмәт етештереүсәнлегенә өлгәшә. Был шоферҙар комбайндарҙан ырҙын табағына иген ташыуҙа ла һәйбәт эшләнеләр.

Н. БУСАЛАЕВА,
колхоз диспетчеры.

Тәүлек әйләнәһенә

Фрунзе исемендәге колхоз механизаторҙары 1500 гектар майҙанды туҡна һөрҙө. Тағы ла 1800 гектар ҡала.

Ике «Кировец» һәм гусеницалы дүрт Т-4 тракторы туҡтауһыҙ тәүлек әйләнәһенә эшләй. Механизаторҙарҙың эше ике сменала ойоштороло ҡаҡ. Көн һайын уртаса 120 гектар майҙанда ер һөрәләр. Алдынғы механизаторҙар Рафиҡ Юлдашбаев, Рәүил Сағынбаев, Рәсүл Нураев һәм Мәжит Килдебаевтар, К-700 тракторында бер-береһен алмаштырып, смена нормаларын 140—150 процентҡа үтәй.

Уларҙың һәр береһенең эштән мөһимлеген ацлауы техниканы юғары етештереүсәнле файҙаланырға булышлыҡ итә, шулай итеп, киләһе йыл уцышы өсөн нигеҙ һалына.

Х. КИЛДЕБАЕВ,
колхоз идараһы председателе.

Иген һуғыу һәм һатыу барышы

(14 сентябргә)

Беренсе графала — хужалыҡтар, **икенсеһендә** — иген һуғылған, **өсөнсөһөндә** — дәүләткә тапшырылған (планға ҡарата проценттарҙа).

Колхоздар:			Совхоздар:		
Фрунзе исем.	74	75	«Аҡъяр»	66	39
«Новый путь»	74	60	«Таналыҡ»	98	53
«Кр. доброволец»	97	45	«Хәйбулла»	94	50
Калинин исем.	77	50	«Маҡан»	94	42
«Красное знамя»	26	21	«Матрай»	60	24
Ленин исем.	19	8	«Степной»	98	92
«Һаҡмар»	48	81			
Салауат исем.	41	72	Район буйынса:	74	41

Оҙаҡ ваҡыт дауам иткән ямғырҙарҙан һуң, район колхоздарында һәм совхоздарында урыш йыйыу эштәре аҡрынлап ҡыҙа төштө. Тотош районда буйынса пландағы 95060 урынына 79063 гектар майҙанда иген культуралары сабылды, 70655 гектарҙан 99654 тонна иген һуғып алынды, һәр гектарҙан төшөм 14,1 центнер тәшкил итте.

Райондың күпселек хужалыҡтарында ураҡ тамамланыуға яҡынлаша. Ләкин 14 сентябргә ҡарата мәғлүмәттәрҙән күренеүенсә баҫыуҙарҙа байтаҡ иген яҫмаларҙа ята, күпселеге сабылмаған әле.

Бөгөн, быҙаса булмаҡанса, оперативлылыҡты арттырырға, игенде йыйып алыу өсөн булған бөтә мөмкинлекте файҙаланырға, техниканың боҙолоп тороуын мөмкин тиклемгә кәметергә кәрәк. Техника менән оҫта маневр яһап, игенде юғалтыуһыҙ һәм ошо көндәрҙә йыйып алыу өсөн тырышырға кәрәк.

Шул уҡ ваҡытта орлоҡ һалыуға, туҡна һөрөүгә һәм дәүләткә иген һатыуға айырыуса иғтибар талап ителә. Әйтергә кәрәк, был мөһим сараларҙы үткәреү темпы бөгөн күпселек хужалыҡтарҙа ҡәнәғәтләнерлек түгел. Шулай, район буйынса 46793 гектар ғына туҡна һөрөлгән, йәғни планға ҡарата 43 процент, 17951 центнер яҙғы культуралар орлоғо һалынған.

Иген һатыу темпы ла кәмене. 14 сентябргә ҡарата 41253 тонна иген тапшырылған. «Аҡъяр», «Матрай» совхоздары, «Новый путь» колхозы эшсәндәре игенде данми рәүештә оҙата. «Степной» совхозы, «Һаҡмар» колхозы игенселәре йыллыҡ планды үтәүгә яҡынлашты.

РАЙОН АКТИВЫ ҠӘҠӘШМӘҺЕ

КПСС райкомында ҡәҡәшмә үткәрелде, уға колхоздар һәм совхоздар, предприятиелар, учреждениелар һәм ойошмалар етәкселәре, партия ойошмалары секретарҙары, партия активы саҡырылды.

Ауыл хужалығының производство подразделениеларындағы эштәрҙең торошона киң анализ яһап, ауыл хужалығы продукцияһын етештереүҙе һәм һатыуҙы арттырыу буйынса район партия ойошмаһы, совет, хужалыҡ органдары һәм йәмәғәт ойошмаларының бурыстары һәм ошо тармаҡтың перспективалы проблемалары тураһында КПСС Өлкә Комитетының ауыл хужалығы һәм Азыҡ-түлек промышленносы бүлеге мөдире урынбаҫары **Ф. Х. Диваев** сығыш яһаны.

Башҡорт АССР-ы Министрҙар Советы председателенең беренсе урынбаҫары, республиканың Дәүләт агропромы председателе **И. Ә. Ғәбитов** партия күрһәтмәләрен тормошҡа ашырыу буйынса район активының ҡисектергеһеҙ бурыстары тураһында һөйләне.

Ҡәҡәшмәне партия райкомының беренсе секретары **М. Х. Шаһиев** алып барҙы һәм йомғаҡлау һүҙе менән сығыш яһаны.

ХАЛЫҠ ДЕПУТАТТАРЫ РАЙОН СОВЕТЫНЫҢ ИКЕНСЕ СЕССИЯҺЫН САҠЫРЫУ ТУРАҺЫНДА

Халыҡ депутаттары район Советының икенсе сессияһы 26 сентябрҙә көндөҙгө сәғәт 2-лә райсовет башҡарма комитетының ултырыштар залында уҙғарыла.

Көн тәртибендә:

1. Райондың совет һәм хужалыҡ органдарының КПСС Үҙәк Комитеты, СССР Верховный Советы Президиумы һәм СССР Министрҙар Советының 1986 йыл 25 июлдәге «КПСС-тың XXVII съезды ҡарарҙары нигеҙендә социль-икономик үҫеште тиҙләтеү өсөн халыҡ депутаттары Советтарының ролен артабан арттырыу һәм яуаплылығын көсәйтеү буйынса саралар тураһында»ғы һәм РСФСР Верховный Советы Президиумы һәм РСФСР Министрҙар Советының 1986 йыл 27 августағы ошо мәсьәлә буйынса ҡарарҙарынан сыҡҡан бурыстарҙы тормошҡа ашырыуы барышы тураһында.

Даими комиссияның ултырыштары сәғәт 11-ҙә башлана.

Тикшереләсәк мәсьәлә буйынса тәҡдимдәрҙе һәм теләктәрҙе райсовет башҡарма комитетына 25 сентябргә тиклем ебәрергә.

Сессияға халыҡ депутаттарының район Советы депутаттары, халыҡ депутаттарының поселок һәм ауыл Советтары председателдәре, предприятиелар, ойошмалар, учреждениелар етәкселәре саҡырыла.

Райсовет башҡарма комитеты.

Рейд дауа итә

2. ТӘРТИП ҺӘР ЕРҘӘ КӘРӘК

Яңы уңыш тураһында хәстәрләп, һуңламайынса тейешле кимәлдә орлоҡ фонды һалып ҡалдырыу —киләһе йылғы уңышты алыуға әҙермен, тигән һүҙ. Етәкселәр һәм белгестәр яуаплы эштәр башҡара, ләкин быны уларҙың барыһы ла аңлап еткермәй. Быйыл 12 сентябрҙә баҫылып сыҡҡан тәүге рейд материалыбыҙ ҙа тап шул турала, «Степной» совхозында орлоҡ һалыу эшенең ҡәнәғәтләнмәҫлек барыуы тураһында һөйләнгәйне.

Совхоз етәкселәренең һәм агрономдарының эшенә тейешле баһа бирергә кәрәк. Орлоҡ склады таҙартылған. Һалынған орлоҡ яҡшы һаҡлана. Махсус табличкаларҙан күпме һәм ниндәй орлоҡ һалынғанын белеп була. Бинала ҡоро.

Ҡайһы бер мәсьәләләрҙе хәл итеүҙә оперативлыҡ һәм инициатива күрһәтелә. Мәҫәлән, хужалыҡта малдарҙы яҙғы, йәйге айҙарҙа йөшел аҙыҡ менән өҫтәмә туҡландырыу мәсьәләһе киҫкен тора. Был осраҡта «юғарынан» күрһәтмә биреүҙәрен көтөп тормандар, 50 гектар майҙанға арыш сәскәндәр. Орлоҡто ла үҙҙәре тапҡандар, күрше Зианчура районынан алып килеп сәскәндәр. Һәм баҫыу йәшел балаҫ менән ҡаплана. Бындай инициатива ярай ҙа ул, ләкин совхозда ябай ғына нәмәне лә оноталар. Алып килепгән орлоҡ тураһында бер ниндәй ҙә документ юҡ. Ә был ябай эш түгел. Орлоҡтар менән бергә теге йәки икенсе ҡый үләнен алып килеүгә сик ҡуйып булмай, совхоздың ғына түгел, ә район баҫыуҙарында ла уларҙың таралыуы ихтимал.

Орлоҡ өлгөһө дәүләт орлоҡсолоҡ инспекцияһына тикшерергә килтерелмәгән. З. Ҡарасов үҙенең эшенә һалҡын ҡараған. Тейешле һығымталарға килергә, тапшырылған эш участкаһы өсөн яуаплылыҡты күтәрергә кәрәк.

«Красное знамя» колхозы идараһына баҫҡаҡ юлдан үтеп, көскә килеп еттек. Булып үткән ямғырҙар бында ла урып йыйыу эштәрен туҡтатырға мәжбүр иткән. Игендең күп өлөшө йыйып алынмаған әле, Нигеҙҙә арпа ғына тулыһынса йыйылған (бөтәһе 18347 центнер) һәм бөтәһе тиерлек дәүләткә оҙатылған. Тейешле 5000 урынына тик 2800 центнер арпа орлоҡҡа һалынған. Яҡшы орлоҡто күберәк туплау мөмкинлеге була тороп уны файҙаланмағандар.

Колхоз председателе Ф. Ҡолсонбаевҡа ауырға тура килә. Хужалыҡта агроном да юҡ. Орлоҡсолоҡ менән шөғөлләнеүсене яңы ғына тәғәйенләгәндәр. Бер кешегә һәр ерҙә булып өлгөрөү бик ҡыйын, был иһә яҡшы һөҙөмтәләргә алып бармай. Ебәмәһә, ямғырҙар хәлде ҡатмарлаштырған. Был осраҡта РАПО белгестәре менән кәңәшләшергә кәрәк ине. Йәки «Таналыҡ» совхозы кеүек эшләргә була: игенселәр быйылғы ураҡ шарттарын иҫәпкә алып, орлоҡто, түбән сифатлы булһа ла етерлек күләмдә һалып ҡалдырғандар. Улар мөмкинлек булған осраҡта яңынан орлоҡ һалып, складтарҙағыһын дәүләткә оҙатасаҡтар.

«Красный доброволец» колхозында орлоҡ һалыу буйынса эштәр арыу бара. Яҡшы складтар булмау ҙа игенселәргә ҡамасаулыҡ итмәй. Орлоҡтар оҙаҡ тоҡсарланмай складтарға һалына. Уның сифаты тураһында мәғлүмәттәрҙең юҡлығы ғына төп етешһеҙлек булып тора. Агроном В. Кәримов орлоҡ өлгөләрен орлоҡсолоҡ инспекцияһына анализға ебәреү өсөн ваҡыт тапмаған. Үҙ көсөндә һәм мөмкинлектәренде белмәйенсә, иртәгәһе көнгә аныҡ планһыҙ эшләү бик ауыр әлбиттә. Бигерәк тә бөгөн, бөтә илдә үҙгәртеп ҡороу һәм тиҙләнеш курсы менән барғанда, былай эшләргә ярамай.

Ф. ЯҠШЫҒОЛОВА,
дәүләт орлоҡсолоҡ инспекцияһы начальнигы.

В. АБДРАХМАНОВ,
беҙҙең махсус хәбәрсебеҙ.

Партия тормошо: отчеттар һәм һайлауҙар

Эшләнәһе эштәр күп әле

Хәйбулла РАПО-ны ремонт техник предприятиеһының партия ойошмаһында өс партгруппа бар. Улар менән бай тормош тәжрибәһе булған, коллективтың абруй ҡаҙанған коммунистар етәкселек итә. Ике партгруппала отчет-һайлау йыйылыштары булып үтте.

Партгрупорг булып Ф. Ә. Мәмбәтов эшләгән ремонт мастерскойы партгруппаһында үткәрелгән йыйылышта коммунистар инженер-техник работниктарҙың, шулай уҡ партгруппа эшендәге кәмсөлектәрҙе һыйыу асып һалды.

Транторҙарҙы һәм улардың узелдарын яҡшы сифатлы итеп ремонтлау буйынса ошоғаса тейешле саралар күрелмәй.

Йыйылып барышында мастерскойҙың айырым работниктары тарафынан хеҙмәт дисциплинаһын бозоу осраҡтарының йышайыуы телгә алып үтелде.

Ситтән килеп эшләүсе механизаторҙарҙың йыш ҡына эшкә һуңлап килеүҙәре, район хужалыҡтары уларҙы алып киләү өсөн транспорт бирмәүе тураһында коммунистар борсолоп һөйләне. Хеҙмәтте былай насар ойоштороу мастерской работниктарының эшкә булған мөнәсәбәтен һулпәнәйтә.

Йыйылышта РАПО советы председателе З. Н. Кадиков ҡатнашты һәм сығыш яһаны. Ул партгруппаға ремонтланған техниканың сифатына, графикты күҙәтеүгә, кем тарафынан бөрәк яһалыуын асыҡларға һәм уларға ҡарата тейешле саралар күрергә ҡарәклеген билдәләп үтте. Партгрупоргҡа үҙ эшенә тәнкит күҙләпенән сығып ҡарарға, коллектив эше менән даими ҡыҙыҡһынырға тәҡдим итте.

Автогараж партия группаһында һигеҙ коммунист (партгрупорг А. Г. Ласынов). Был ремтехпредприятие партия ойошмаһында иң ҙур группа. Фекер алышыуҙа сығыш яһаған коммунистар башҡа предприятиелар, бигерәк тә автомобилдәрҙе хеҙмәтләндереүсе станция менән үҙ-ара бәйләнешле ныҡлыҡҡа ҡарәклеген һыҙыҡ өстөнә алып үтте. Гараж механиктары исемене күп ҡеүә тәнкит һүҙҙәре әйтелде, уларҙың водителдәр гаражда сәнта тәртип булдырыу һәм дисциплинаны ныҡлыу буйынса ҡәҙәтләнерлек эшләмәүҙәре билдәләп үтелде.

РОВД начальнигы С. Д. Зәйнуллин йыйылышта сығыш яһап, автогараж һәм ремтехпредприятие етәкселәре тарафынан шоферҙар арағында дисциплинаны ныҡлыу буйынса эш алып барылырға тейешлеге тураһында һөйләне.

Коммунистар башҡарылған эштәргә йомғаҡ яһап, асыҡ тауыш менән Ф. Ә. Мәмбәтов менән А. Г. Ласыновтарҙы ҡайтанан үҙҙәренең етәкселәре итеп һайланы.

Ә. ДӘҮЛӘТБИРҘИН,
РАПО ремпредприятиеһының партбюро секретары.

Яуаплылыҡ тойғоһо менән

Партия группаһы — коммунистарҙың ҙур коллективының тәүге ячейкаһы. Ул производство сфераһы менән тыуранан-тура бәйле, шулай булғас, бөтә ҙур механизмдың үҙәгенә тоташкыл итә.

Октябрь ер аҫты рудниҡтың эске шахта транспорты участкаһында ла шундай группа бар. Ул 8 коммунисты берләштерә. Партия ядроһы күп һанлы түгел. Күптән түгел коммунистар үҙҙәренең отчет-һайлау йыйылышына — башҡарылған эштәрҙе йомғаҡ яһарға, борсоған проблемалар тураһында һөйләшергә, киләсәккә пландар билдәләргә йыйылды.

Һөйләшеү эшлекле, ентекле һәм файҙалы булды. Кешеләр күп һанлы, иҫтә-иҫ тәрән, бергә эшләүҙәр ҙә, йыйылышта һөйләшерлек һүҙҙәр күп булды. Мәҫәлән, күтәргес участка механигы И. Х. Күсәкәевты бөтә коммунистарҙың ҙа бер тигеҙ көсәргәнешле эшләмәүе борсой. Ҡайһы бер ҙә хатта коммунистар етәкселек иткән коллектив «партизаныҙҙарҙан» ҡалыша.

— Был шунан килеп сыға, — тип йомғаҡланы ул үҙенең сығышын, — һәр кем үҙенә тапшырылған эш участкаһында яуаплылыҡ тойғоһо менән һәм аҡлы рәүештә хеҙмәт итмәй. Беҙҙә хужаһыҙлыҡ билдәле урын биләй. Эш барышында тәҙәтеп китерлек нимәләрҙе күрмәй үтәбеҙ, «юғарыҙан» әйтеүҙәрен көтәбеҙ. Беҙ коммунистарҙың ҡайһы берҙәре, мәҫәлән, һаҡсыл ҡарау тураһында онотабыҙ. Һөҙөмтәлә инструменттар, инвентарь етешмәй. Ә уларҙы һатып алыу өсөн күпме аҡса тотонолоуын иҫәпкә алмайбыҙ. Былар-ҙың барыһы ла беҙҙең хеҙмәтебеҙҙең һыҙғы һөҙөмтәларендә сағыла. Бер көн менән йәшәйбеҙ, күңел биреп эшләүселәр әлегә бик аҙ.

Унан һуң сығыш яһаусылар ҙа коллективҡа яҡшы эшләүгә ҡамасаулаусы ҡайһы бер мәсьәләләрҙе һәм проблемаларҙы асыҡтан-асыҡ күрһәтә алды. Ләкин һәр кем барыһын да үҙендән башларға, һәр КПСС ағзаһының партия яуаплылығын күтәрергә ҡәрәк тигән фекерҙе килде. Коммунистар производство һәм хеҙмәт дисциплинаһының торошона ла ҡаҡылды. Сәнки борсолорлоҡ урын бар. Билдәһеҙ сәбәптәр арҡаһында пропулдар яһала, хәүефһеҙлек техникаһы ҡаҡшәләрен боҙоу фактта-рына юл туйыла.

Коммунистар сменаларҙың үҙ-ара мөнәсәбәте тураһында ҡаҡты борсолоп һөйләне. Электровоз машинисы У. Бикбовтың әйтеүенә ҡарағанда, сменаға тәҡәртылмаған вагондар йыш ҡалдырыла. Юлдарҙың торошона контроль юҡ. Эшселәргә тейешле хеҙмәт шарттары булдырыу буйынса ла эш кәнәәтләнерлек алып барылмай. Ҡайһы берҙә хатта ябай респираторҙар ҙа етешмәй. Былар-ҙың барыһы ла хеҙмәт етештереүсәнлегенә кире йоғонто яһай.

Шулай итеп, коммунистар кәмселектәрҙе билдәләнеләр, файҙаланылмаған резервтарҙы асыҡланылар. Ә етешһеҙлектәр, ҡыҙыныҫҡа ҡаршы, етерлек.

Дөйөм алғанда, участкала эш ритмлы алып барылмай, запас частарҙың етешмәүе, тау тотомонда руданың аҙ булыуы эште тотҡарлай. Коммунистар бигерәк тә ремонтсылар группаһы эшенә ризаһыҙлыҡ белдерҙе. Ремонтсылар наряд-заданиены, тау мастерҙары йәки бригада ағзалары журналға яҙған иҫкәрмәләр менән танышмайынса, алдан уҡ алып киләләр. Коммунист Е. В. Попов сменаһы йыш ҡына айлыҡ пландарын үтәмәй.

Коммунистарҙың ваймаһыҙлыҡ күрһәтмәүе тыуаныслы, улар эштәге проблемаларҙы хәл итеү юлдарын бергәләп эҙләйҙәр. Уларҙың талапсан, эшкә дәртле икәнлектәре һүҙҙәренән уҡ һиҙелеп тора. Отчет-һайлау йыйылышындағы һөйләшеү, ҡабул ителгән ҡарарҙар ер аҫты транспорты участкаһы коллективын алға әйҙәйәсәк, тип ышанырға кәрәк.

Партгрупорг булып Д. Х. Абдуллин бер йыл ғына эшләй. Шулай ҙа ниттәштәре уның яҡшы ойоштороусы һәм етөксе икәнлеген баһалап өлгергән. Йыйылышта партгрупорг һайлау мәсьәләһе күҙ ҡатылғас, барыһы ла бер тауыштан уның исемен телгә алды. Был мәлдә партгрупорг үҙе ләҫ төп йүнәлештәрҙе билдәләп өлгергәндер, һәм хәҙер ул яңы көс менән эшкә тотонор; коммунистар әйткән бөтә иҫкәрмәләрҙе иҫәпкә алып, тейешле саралар күрер, әлбиттә.

Б. СӘҒИТОВ.

ХЕҢМӘТЕНӘ КҮРӘ ХӨРМӘТЕ

СССР Верховный Советының 1974 йылдың 18 ғинуарындағы Указы нигеҙендә Башҡорт АССР-ы Верховный Советының 1987 йылының 15 июлендәге Указы буйынса оҙаҡ йылдар буйы намыҫлы эшләгәндәре өсөн «Хеҙмәт ветераны» миҙалы менән наградландылар:

Хәйбулла совхозы буйынса:

Сәйтов Гилман Язар улы — чабан.

Фәйзуллин Сәғит Ғибазулла улы — слесарь-моторист.

Фәйзуллин Хәйбулла Сәйфулла улы — чабан.

Фәйзуллин Киниәбай Ғөбәй улы — чабан.

Хөсәйенова Нурсилә Ғиндулла ҡыҙы — һауынсы.

Шәмсетдинов Амур Әбделхәйр улы — трактор-сы.

Иәрмөхәмәтов Мөхәмәтша Мөхәмәтдин улы — һөт ҡабул итеүсе.

Иәрмөхәмәтов Миңлебай Насиҫ улы — мал ҡараусы.

Профсоюзда отчет һәм һайлауҙар

СССР профсоюздары Уставы тарафынан билдәләнгән полномочиялар ҙоғоноң уҙыуы сәбәпле, сентябрь — ноябрҙә профгруппаларҙа, цех ойошмаларында профсоюздың 150-гә тиклем ағзаһын берләштергән тәүге ойошмаларҙа отчет-һайлауҙар үткәреләсәк. Ул 119 профсоюз группаһына, 50 цех һәм агропромышленность комплексының 8 тәүге ойошмаларына ҡағыла.

Быйылғы отчет һәм һайлауҙар СССР профсоюздарының XVIII съезынан һуң тәү тапҡыр үткәрелеүе, йәмғиәтебеҙҙең икономик һәм рухи тормошон үҙгәртеп ҡороу шарттарында, Бөйөк Октябрҙең 70 йыллығын байрам итеүгә әҙерлек барған осорҙа үҙҙарылыуы менән айырыуса аһәмиәткә эйә. Был бөтә профсоюз органдарына отчет-һайлау кампанияһын һәр ерҙә лә тейешле кимәлдә үткәреүгә өлгәшеү бурысын йөкмәтә.

Отчет һәм һайлауҙарҙың мәҡсаты — КПСС-тың XXVII съезы, партиябыҙ Үҙәк Комитетының ғинуар һәм июнь (1987 йыл) Пленумдары, СССР профсоюздарының XVIII съезы ҡарарҙарын, 1987 йылғы һәм ун икенсе биш йыллыҡ заданиеларын үтәүгә хеҙмәтләндерҙе туплау, үҙгәртеп ҡороуҙы тәрәнәйтеү һәм тиҙләтеү, профсоюз тормошон демократлаштырыу буйынса нимә эшләнгәнлеген һәм нимә эшләргә кәрәклеген билдәләү.

Хәҙерге ваҡытта производствоның алдынғы эшсәндәре һәм хеҙмәт коллективтары байҡаҡ. «Матрай» совхозынан Новопетровка һөтсәлөк фермаһы һәм З. Демидованың коллектив подряд буйынса эшләүсе звеноһы, «Маҡан» совхозының мал һимертеү майҙансығынан Р. Татлыбаевтың ҡанлы звеноһы, Мәмбәт һарыҡ фермаһы, «Аҡъяр» совхозының суслы фермаһы коллективтары, «Таналыҡ» совхозынан машина менән һауыу оҫталары Т. Авдеева, З. Сәлимгәрәева, Г. Шәйехова, «Новый путь» колхозынан Р. Вәлиева, А. Слащева, «Аҡъяр» совхозынан быҙау ҡарҙусы М. Кулямина, суслы ҡараусы И. Юрчева, «Маҡан» совхозынан чабан Р. Сәйфуллиндың уңыштары юғары.

Быйылғы уҙатта комбайнерҙар «Таналыҡ» совхозынан И. Әбделмәнов һәм В. Чабанов, «Матрай» совхозынан З. Хәсәнов һәм А. Мырзабаев, «Маҡан» совхозынан В. Артамонов, ҡуҡуруз үҫтереүселәр Салауат исемендәге колхозҙан С. Киилдебаев һәм Фрунзе исемендәге колхозҙан Р. Байтуҡаров, РАПО-ның ремпредприятиеһынан шоферҙар В. Самохин һәм А. Ишмилдин, «Матрай» совхозынан туҡ ҡарәүҙә ҡатнашыусы механизаторҙар Д. Рахманғолов һәм Г. Байназаровтар ҙур хеҙмәт өлгеһе күрһәтә.

Профсоюз комитеттарының бурысы отчет-һайлау йыйылыштарында бөйөк Октябрь юбилейы айҡанлы ойоштороған ярыш тарафынан тыуҙырылған боевой көйеф күтәренкелеген яҡлауға, уға артабан үҫеш биреүгә ҡайтып ҡала. Социалистик ярышты ойоштороуҙы камиллаштырыу сараларын билдәләү һәм уны бөтә яҡтан тикшереү ҙур әһәмиәткә эйә. Хәҙер планды арттырыш үтәүгә ҡарағанда, уның бөтә төп күрһәтәстәр буйынса үҙ ваҡытында һәм юғары сифат менән үтәлеүе мөһим. Профсоюз йыйылыштарында ошо хаҡта һүҙ алып барыу файҙалы булыр ине.

Йыйылыштарҙа хужалыҡ итеүҙең, тулы хужалыҡ иҫәбенә һәм үҙидараның яңы методтарын индереү барышы, профсоюздарҙың унда нисек ҡатнашыуы тураһында асыҡтан-асыҡ һөйләшергә кәрәк.

Производствоның эске хужалыҡ иҫәбе һәм коллектив подряд, яңы тарифтарға һәм оҡладтарға күсеү, предприятие фондтарын булдырыу һәм бүлеү — ошоларҙың бөтәһендә лә профсоюз ойошмалары активлы һәм белеп ҡатнашырға тейеш. Һәр хеҙмәтсәндең эш участкаһында, бригадала яңы шарттарҙа эшләү мәғәнәһен белеүе мотлаҡ. Былар-ҙың бөтәһе лә отчет-һайлау кампанияһы барышында үҙенең сағылышын табырға тейеш.

Социаль сфераның йылдам үҫеше, кешеләрҙең торлаҡ шарттарын яҡшыртыуға, хеҙмәтте һаҡлауға, профилактикаға һәм ауырыу осраҡтарын кәметеүгә, тейешле производство конкурсын булдырыуға, Азаҡтүлек программаһын үтәүгә профсоюз ойошмаларының ниндәй өлөш индереүе отчет-һайлау йыйылыштарында ҡатнашыусыларҙың иғтибары үҙәгендә булырға тейешлеге тулыһынса аңлашыла. Был мәсьәләләрҙе хәл итеүҙә профсоюздар актив, эшлекле ҡатнашырға тейеш.

Профсоюз ойошмаларында тәрбиәүи эштең торошона, кешеләрҙе тәрбиәләүҙә йәмғиәт фикере ролен күтәреүгә, хеҙмәт һәм йәмғиәт дисциплинаһын боҙоусы һәр кешегә коллективтың актив йоғонтоһона бөтә яҡтан анализ яһарға ла кәрәк. Докладтарҙа һәм сығыштарҙа эскелеккә һәм алкоголизмға, эшләмәй доход алыуҙарға ҡаршы көрәш буйынса партия һәм хөкүмәт ҡарарҙарын үтәү йәһәтенән профсоюз ойошмалары тарафынан үткәрелгән эшкә анализ бирергә лә онотороға ярамай.

Тотош профсоюз эшен яңыртыу һәм үҙгәртеп ҡороу рухы һәр йыйылышта сағылырға тейеш. Профкомдарға отчет документтарында эштәрҙең торошона өҫтән генә ҡарамайынса, ә тотош профсоюз ойошмаһының һәм уның һәр ағзаһының эшенә тулыраҡ анализ бирергә кәрәк. Отчеттарҙы тикшергәндә тәнкит һәм үҙтәнкит атмосфераһы тыуҙырылырға, бынан алда үткән йыйылыштарҙа ҡатнашыусылар тарафынан әйтелгән тәнкит иҫкәрмәләр һәм тәҡдимдәр һөҙөмтәләре тураһында һүҙ алып барылырға тейеш. Тәүге ойошмаларҙың иң күп һанлы звеноһы — профгруппаларға айырыуса иғтибар итергә, производство һәм тәрбиәүи бурыстарҙың улар тарафынан нисек хәл ителеүен күрһәтергә кәрәк.

СССР профсоюздарының XVIII съезының эске профсоюз тормошон ҙртабан демократлаштырыу буйынса күрһәтмәләре ошо отчет-һайлау кампанияһында практик яҡтан тормошҡа ашырылырға тейеш. Профсоюз органдары составына һәр кандидатураны ирекле һәм бөтә яҡтан тикшереп күрһәтеү бик мөһим. Тураған-тура отчет-һайлау йыйылыштарында тикшерелгән кандидатураларҙың ҡаны, ҡанизә булараҡ, профоргандың ултырышында билдәләнгәнҙән күберәк булһа ла ярай. Уставҡа яраҡлы рәүештә профсоюз органдары һайлауҙары ябыҡ (йәшерен) тауыш биреү юлы менән үҙҙарылыр. Йыйылыштарҙа ҡатнашыусы профсоюз ағзаларының күпселеген ризалығы менән профгруппорттар, цех комитеттары, профкомдар һәм тәүге профсоюз ойошмаларының ревизия комиссиялары асыҡ тауыш менән һайланырға мөмкин.

Профоргандарҙы һайлаған ваҡытта демократик башланғыстарҙың артабанғы үҫеше уларҙың сифат составының профсоюз ойошмаларының социаль составына мөмкин тиклем тулыраҡ яраҡлы булыуына булышлыҡ итергә тейеш. Кампания барышында профсоюз органдарына эшселәр ябай колхозсылар, һөнәрсе йәштәр, төрлө милләт вәкилдәре иҫәбенән абруйлы һәм принципиаль профсоюз ағзаларын һайларға кәрәк. Профсоюз ойошмалары башында ваҡыт талабын аңлаған, үҙгәртеп ҡороу уңышы өсөн үҙ көсөн йәлләмәгән актив кешеләр торорға тейеш.

Отчет-һайлауҙар уңышлы һәм ойошҡан рәүештә үтһен өсөн профкомдар профгруппаларға, цехкомдарға йыйылыштарҙы үткәреүгә әҙерләүҙә һәм уны уҙғарыуҙа яҡтан күрһәтергә тейеш. Профком вәкиле йыйылышта ҡатнашып ҡына ҡалмайынса, унда актив сығыш яһарға ла тейеш. Был эшкә хужалыҡ етәкселәре, ауыл хужалығы белгестәренән йәлеп ителеүе мөһим.

Ғөмүмән, эштәр һәм проблемалар байтаҡ. Профсоюздарҙағы отчет-һайлау кампанияһының КПСС-тың XXVII съезы һәм СССР профсоюздарының XVIII съезы тарафынан билдәләнгән ҙур бурыстарҙы хәл итеүҙә уларҙың активлығын арттырыуға булышлыҡ итәсәгенә ышаныу ҡалды.

В. ОВЧИННИКОВ,
агропромышленность комплексы работниктары профсоюзы райкомы секретары.

КПСС РАЙКОМЫНДА, РАЙСОВЕТ БАШҠАРМА КОМИТЕТЫНДА, ПРОФСОЮЗ РАЙКОМЫНДА ҺӘМ ВЛКСМ РАЙКОМЫНДА

ЕҢЕҮСЕЛӘР БИЛДӘЛӘНДЕ

Район хеҙмәт коллективтарының малсылық продуктларын етештереүҙе һәм һатыуҙы арттырыу, малдарҙың продуктлылығын күтәреү һәм уларҙың һанын ишәйтеү буйынса 1987 йылдың ҡыҙ айындағы социалистик ярышы йомғаҡтарын тәрән сығыш, КПСС райкомы бюроһы, халық депутаттарының район Советы башҡарма комитеты, агропромышленность комплексы работниктары профсоюзы райкомы президиумы һәм ВЛКСМ райкомы бюроһы **«Маҡан» совхозы коллективын** ярышта еңеүсе тип таҡты, ул дәүләткә ит һатыу планын 133, һөт буйынса 116 процентҡа үтәгән.

Коллективҡа КПСС райкомы, халық депутаттарының район Советы башҡарма комитеты, агропромышленность комплексы работниктары профсоюзы райкомы һәм ВЛКСМ райкомының күсмә Ҡызыл байрағы бирелә.

Һөт етештереүҙе һәм һатыуҙы арттырыу буйынса социалистик ярышта **Ленин орденлы «Матрай» совхозының Новопетровка һөтсөлөк фермаһы коллективы** еңеүсе тип табылды, ул бөтәһе 8746 центнер, йәғни 398 һыйырҙың һәр береһенән 2197-шәр килограмм һөт һауған, йыл башынан алып һөттән 92 процентын беренсе сорт менән һаттыҡ.

Коллективҡа КПСС райкомы, халық депутаттарының район Советы башҡарма комитеты, агропромышленность комплексы работниктары профсоюзы райкомы һәм ВЛКСМ райкомының күсмә Ҡызыл байрағы бирелә.

Коллектив подряд буйынса эшләүсе звенолар араһында **Ленин орденлы «Матрай» совхозынан З. И. Демидова етәкселегендәге звено коллективы** социалистик ярышта еңеүсе тип табылды, ул бөтәһе 3580 центнер, йәғни 160 һыйырҙың һәр береһенән 2237-шәр килограмм һөт һауған.

Звено коллективына КПСС райкомы, халық депутаттарының район Советы башҡарма комитеты, агропромышленность комплексы работниҡтәре профсоюзы райкомы һәм ВЛКСМ райкомының күсмә Ҡызыл вымпелы бирелә.

Сыуҡа фермалары араһында **«Аҡъяр» совхозының суҡа фермаһы коллективы** социалистик ярышта еңеүсе тип табылды, ул суҡалар һимертеүҙә төүлегенә уртаса 353-әр грамм, шул иҫәптән августа 386-шар грамм артым алған һәм артым алыу планын 106 процентҡа үтәгән.

Фермa коллективына КПСС райкомы, халық депутаттарының район Советы башҡарма комитеты, агропромышленность комплексы работниктары профсоюзы райкомы һәм ВЛКСМ райкомының күсмә Ҡызыл вымпелы бирелә.

Партия, профсоюз, комсомол комитеттарына һәм бюроларына, халық депутаттарының ауыл Советтары башҡарма комитеттарына, хужалыҡтар етәкселәре һәм белгестәренә малсылық продукцияһын етештереүҙе һәм һатыуҙы арттырыу, Бөйөк Октябрҙең 70 йыллығын лайыҡлы ҡаршылау, ун икенсе биш йыллыҡтың икенсе йылы заданиеларын уңышлы үтәү өсөн социалистик ярышты киңерәк йәйелдерергә тәҡдим ителде.

Аныҡ етәкселек һөҙөмтәһендә

Һаҡмар-Назарғол бригадаһы малсылық, шулай уҡ баҫыусылыҡты үҫтереү буйынса «Һаҡмар» колхозында алдынғыларҙан һанала. Комплекслы бригада менән КПСС ағзаһы Рәхмәтулла Шәрипов өсөнсө йыл етәкселек итә.

— Бригаданың экономикаһын нығытыуҙа, — тип һөйләй колхоздың партком секретары С. Я. Тороп ов, — ныҡлы мал аҙығы базаһы булдырыуҙа коммунист Р. Шәрипов тың хеҙмәт өлөшө ҙур.

Колхоз бригадалары араһында һөттө тулайым етештереү буйынса Һаҡмар-Назарғол бригадаһы алда килә, был фермала һауым үткән йылдарға ҡарағанда һиҙелерлек артҡан. Быйыл һәр гектарҙан 26,3 центнер ҡарыш алынған, башҡа культураларҙың да уңышы насарҙан түгел.

Бында пландағы 3600 тонна урынына 4800 центнер, йәки башҡа бригадаларға ҡарағанда күберәк бесән әҙерләнгән. Быйыл бригадаларҙың һәр гектарынан 250 центнер йәшел масса алып, быны тиҫкәр туҡлыҡлы сенаж һалынған.

Бригаданың бындай уңыштарға өлгәшеүендә уның етәксеһенең, һәм әлбиттә уның эшсәндәренең хеҙмәт өлөшө ҙур.

Быйыл бригадала ҡуҡуруҙан да юғары уңыш алғандар. Һәр гектар 300 центнер йәшел масса биргән. Ҡуҡуруҙды бында ҡуптан инде механизатор Әхәт Теләүғолов үҫтерә. Уның апрегаты һәр саҡ тулы эш менән эшләй. Тырышлық аркаһында силос культураһы ваҡытында йыйып алынған. РАПО ремпредприятиеһы шоферҙары Буранбай Әбделмәнов менән Михаил Полозковтар йәшел массаны ташыуҙа юғары етештереүсәнлек эшләгән.

Р. ИМАНҒОЛОВ.

ҺҮРӘТТӘ: комплекслы бригада бригадиры Р. Ш. Шәрипов, ҡуҡуруз үҫтереүсе механизатор Ә. Ф. Теләүғолов һәм ремпредприятие шоферы М. В. Полозков.

Р. БАЙМУРЗИН фотоһы.

Колхоз-совхоздарҙа сентябрҙең беренсе ун көнлөгөндә һауылған һөт

Хужалыҡтар һәм фермалар	Һәр һыйырҙан уртаса һауым (кг)			
	I ун көнлөктө	1986 й. ҡарата +, −	10-сы сентябрҙә	1986 й. ҡарата +, −
Колхоздар:				
Фрунзе исем.	69	— 1	6,7	—0,1
«Новый путь»:				
Ергән	82	+ 2	7,8	+0,2
Иләс	70	— 6	6,5	—0,6
«Кр. доброволец»:				
Әбүбәкир	91	— 4	8,9	0,5
Калинин исем:				
Байҡуҡар	45	— 9	4	—1,3
Переволочан	63	+ 5	6,7	+1
«Кр. знамя»:				
Атингән	56	—11	5,5	—0,7
Иәнтеш	58	+ 1	5,4	—
Ленин исем:				
Ивановка	58	—13	5,2	—0,9
Михайловка	64	— 5	5,5	—1
Пугачевка	51	+ 1	5,1	—
Аҡташ	57	+ 6	5,4	+0,5
«Һаҡмар»:				
Әбеш	39	—10	3,7	—0,8
Б. Арыҫланғол	76	+15	7,4	+1,6
Ҙ. Арыҫланғол	71	+ 4	7,1	+1
Һаҡмар-Назарғол	53	+11	5,2	+1,5
Үрнәк	50	— 2	4,9	—0,3
Салауат исем:				
Ғәлиәхмәт	60	+21	5,9	+2,4
Аҡназар	70	+14	6,9	+1,4
Аҡъюл	47	— 2	4,6	—0,4
Урыҫбай	56	+14	5,6	+1,9
Совхоздар:				
«Аҡъяр»:				
Татыр-Үҙәк	102	+19	10,3	+1,6
Яковлевка	66	— 9	6,3	—0,7
Юлбарыҫ	87	+13	83,	+1,2
Бығаулыҡ	74	— 7	7,2	—
Хворостянка	58	—10	5,4	—1,4
«Таналыҡ»:				
Подольск	83	— 4	7,9	—0,1
Бакаловка	58	— 3	5,2	—0,6
Әҙел	59	—22	5,5	—2,3
Савельевка	98	+ 3	8,9	—1
Таштуғай	78	— 7	7,3	—0,4
Новоукраинка	97	— 3	8,4	—1
«Хәйбулла»:				
Целинный	55	—15	4,7	—2,4
Хоҙайбирҙин	75	+ 4	6,3	—0,3
Комсомол	99	+ 5	9,2	+0,3
«Маҡан»:				
Маҡан	96	+ 2	10	+0,6
Воздвиженка	81	+12	8,1	+1,5
Мәмбәт	103	+22	9,6	+1,6
Сәғит	55	— 5	5,2	—0,8
«Матрай»:				
Уфимск	67	—	6,6	—0,5
Новопетровка	64	— 2	6,2	+0,2
Һарыҡүл	66	—	6,2	—0,4
«Степной»:	85	+13	8,4	+1,4
Район буйынса:	**70**	—	**6,8**	**+0,1**

Бөгөн, район малсылары йәмәғәт малын ҡышлатыу алдында торғанда, һыйырҙарҙың продуктлылығын кәметеүгә юл ҡуймау ҙур әһәмәткә эйә, сөнки бөгөнгөнө ҡулдан ысҡындырһаң, ҡышын ҡыйынға тура киләсәк. «Красный доброволец» колхозының Әбүбәкир, «Аҡъяр» совхозының Татыр-Үҙәк һәм Юлбарыҫ, «Таналыҡ» совхозының Таштуғай һәм Новоукраинка, «Маҡан» совхозының Маҡан, Воздвиженка һәм Мәмбәт, «Степной» совхозы, «Хәйбулла» совхозының Комсомол фермалары коллективтары тап шундай уй менән эшләйҙәр ҙә инде. Бында малдарҙы аҫырау һәм ашатыуҙы яҡшыртыу нәҫәбенә һәр һыйырҙан көн һайын 8—10-ар килограмдан ашыу һөт һауалар.

Ләкин, һауын буйынса сентябрҙең беренсе ун көнлөгөндәге күрһәткестәрҙе августың һуңғы ун көнлөгө менән сағыштырып ҡарағанда, райондың күпселек фермаларында һөттө кәметеүгә юл ҡуйыуҙарын күрергә мөмкин. «Новый путь», Калинин исемендәге, «Красное знамя» колхоздары, «Һаҡмар» колхозының Әбеш һәм Үрнәк, «Хәйбулла» совхозының Целинный һәм Хоҙайбирҙин фермалары һәм башҡа хужалыҡтар коллективтары һауымды байтаҡҡа әҙәйтте.

Ҡайһы бер хужалыҡтар етәкселәре һәм белгестәре дәүләткә һөт һатыу буйынса йыллыҡ пландың уңышлы үтәлеүе менән тыныслана ҡалды һәм һөт етештереүҙе күҙ уңынан ысҡындырҙы. Ә быға бер нисек тә юл ҡуйырға ярамай. Һауын һыйырҙарын өҫтәмә аҙыҡ менән тәьмин итергә ваҡыт, быйыл аҙыҡ етерлек. Ҡышҡы рацион хаҡында ла уйларға кәрәк, ҡайһы фермаларҙа, һыйырҙарға бер килограмм нген фуражы биреп кенә, һаман үләнһеҙ ҡырҙа көтөүҙе дауам итәләр. Хәҙер силос һәм нген культуралары йыйып алынған баҫыуҙарҙа малдарҙы көтөү уңай.

Вайымһыҙҙың эше алымһыҙ

Ҡышҡы осор малсылар өсөн бер ҡасан да еңел булғаны юҡ. Был мал хеҙмәт һәм материаль сығымдарын, һауынсылар, малсылар һәм белгестәрҙән бергәм эшен талап итә. Малсылық продукцияһын һатыу буйынса пландың үтәлеше уларҙың эшне нисек ойоштороуына бәйләнгән. Ошо өҙон ҡышты осорҙа үтеп барған йылда өлгәшелгән бөтә уңыштарҙы нығытыу мөһим.

Районда һыйыр малдары, суҡа, һарық, йылҡыларҙың һаны артты. Быйыл, былтырғы шул уҡ осор менән сағыштырғанда, нт, һөт байтаҡҡа күберәк етештерелде. Һыйырҙарҙың продуктлылығы 84 килограмға артты, һыйыр малдарынан тәүлегенә уртаса 513, суҡаларҙан 304 грамға тиклем артым алынды.

Малсылыҡты артабан үҫтереү өсөн мөмкинлектәр бар һәм байтаҡ. Йәмәғәт малы өсөн 36 мең тонна бесән, 22 мең тонна сенаж әҙерләнде, 84 мең тоннанан ашыу һалам әҙерләү планлаштырыла, силос, ҡатнаш аҙыҡ етерлек күләмдә.

Малсылыҡта эштәр ыңғай бармаған хужалыҡтарҙа ҡышҡа әҙерлек хаҡында айырыуса хәстәрлек күрергә тейештәр. Мәҫәлән, Ленин исемендәге колхоз малсылары (баш зоотехнигы В. Фомин) йәйге осорҙа малдарҙың продуктлылығын бер ниндәй сәбәпһеҙгә кәметеүгә юл ҡуйҙы.

Былтырғы кимәлгә ҡарағанда ит етештереү 250 центнерға әҙәйҙе, ә район буйынса ул 3684 центнерға артты. Ошонда уҡ суҡаларҙан иң түбән артым алалар, тәүлегенә 266-шар грамм ғына. Малдар һаны ла аҡрын арта. Был ҙур һәм ныҡлы хужалыҡ өсөн бындай хәл ғәфу итерлек эш түгел.

«Хәйбулла» совхозы малсылығында ла (Я. Мөхәрләмов) эштәр яҡшынан түгел. Унда ла ит, шул иҫәптән суҡа ите етештереүҙе сәбәпһеҙгә кәметтеләр. Йәш һыйыр малдарынан, суҡаларҙан артым алыу түбән, малдарҙың күпләп үлеүенә юл ҡуйылған.

Бындай хәлде аңлатырлық бер ниндәй ҙә сәбәптәр юҡ. Аҙыҡ етерлек, эшсе ҡулдарға ла ҡытлық кисермәйҙәр, ә бына эште оҫта ойоштороу, белгестәрҙән фермаларҙағы хәлде төҙәтергә тырышыуы күренмәй.

«Новый путь» колхозы етәкселәре һәм белгестәренең дә малдарҙы ҡураларҙа аҫырау тураһында хәстәрлек күреүе һиҙелмәй. Һыуытҡыс башланырға тора, ә Ергән бригадаһындағы аҙбарҙар һаман әҙер түгел. Төҙәлеш материалдарының етешмәүенә һылтанып. Уны табыу өсөн йәй етмәнеме икән ни? Дөрөҫөрәге, быға ойоштоҡаһыҙлық, ғәмһеҙлек һәм бербереһенә һылтанып йәшәү сәбәпсе булған.

Быйыл июль башында Ленин исемендәге колхоз фермаларында уларҙың ҡышҡы әҙерлеген тикшереү буйынса рейд үткәрелде. Колхоздың Михайловка бригадаһында ла төҙәлеш материалдары булмай сыҡты, ә бит улар юлын таптаған. Малтыуар йылы ҡураларҙа ҡышлаясаҡ. Бында ферма мөдүре В. Т. Воробьевтың тырышлығы ла ҙур булған.

Күптәр баҫыуҙарҙа ураҡты ла уңышлы алып барған, малсылық фермаларын да ремонтлаған, башҡа эштәре лә хәл ителгән. Һәр кем быны шулай эшләргә һәм үҙенең участкаһы өсөн яуап биргә тейеш.

М. АҘЪЯНОВ,
РАПО-ның баш зоотехнигы.

Аҙыҡ-түлек Программаһы—дөйөм халыҡ эше

„Бөгөн—иген бөртөгө, иртәгә—башаҡ“

1980 йылдан бирле Уфимск ауыл культура йорто янында ошондай девиз өсөнсө „Башаҡ“ исемле балалар агитбригадаһы йәшәй инде. Сығышына иген башаҡы бөртөгөн тәшкән күгәрсен тәсүрләнгән эмблемаһы ла бар. Агитбригаданың эшен һәләтле, художествоны үҙешмәкәрлек менән мауыҡтыраған 2-се класс ҡыҙҙары башлап ебәргәйне, уларҙың ҡатнаш ансамбль фольклор группаһынан. Уның менән урта мәктәптең музыка работнигы Л. Лобанова етәкселек итә. Балалар ҙур бурыслы, сәнгәт йырларына бик ентекле өйрәтте.

Марина Часовская, Гөлнара Хәмитова, Дилә Сөлеймәнова, Рәмзә Кәримова, Марина Исәкова, яҡ кескәйҙәре лә (агитбригаданың икенсе быуыны) ошо үҙенсәлекле балалар берекмәһендә йыл әйләнәһенә ҙур мауығыу менән шөғөлләнә.

Әгәр фермала йәки йәйге лагерҙа малсылар алдында сығыш яһарға әҙерләнһә, «Башаҡ» «Калинка»ны әҙерәлә. Костюмдар ҙа, репертуар ҙа үҙгәрә. Улар йырҙарҙы һәр сәк ихлас һәм күңелле башҡара, уларға үҙендән ҡушылып йырлап ебәрәүәнде һиҙмәйһеҙ дә, бындай сығыш һәр сәк көслө алҡыштар менән оҙатыла.

Коллективта бейеү менән балалар секторы мөдире Ф. Трофимова (ә был эште Р. Фөмәрова башлап ебәргәйне) етәкселек итә. Музыка етәкселәне М. Арсланов музыка һәм йыр өстөндә эшләй. Сценарий, шиғырҙарҙы культура йорто директоры Р. Журавлева һайлай. Ҡыҙҙар яңы, күңелле йырҙы һәр сәк үҙ итә. Римма Абрамовна Журавлева улар тураһында былай тип һөйләй: «Ҡыҙҙар шиғырҙы ла, бейеүҙәрҙе лә тиҙ өтөп ала. Улар бик һәләтле, фантазияға бай. Әйткәндәй, әлкәндәре культура-агартыу училищеһына йәки сәнғәт институтына уҡырға инергә хыяллана. Тимәк, бөҙгә алмаш үҫә. Ҡыҙҙар үҙҙәре лә был хәлгә белә — уларҙы шуға әҙерләйҙәр ҙә инде. Әгәр культура-агартыу работнигы кадрҙары етешмәү проблемаһы йәшәп ҡалә икән, бында клуб работниктары үҙҙәре ғәйепле, моғайын. Алмашты мәктәп эскәмйәһенән үк тәрбиәләргә, ныҡышмалы әҙерләргә, булдыҡлы һөнәрсе яратырға өйрәтергә кәрәк.

Был яңыраулыҡлы һүҙҙәр түгел, ә ысынбарлыҡ. Балҡаҡта художествоны үҙешмәкәрлектә ҡатнашҡан кеше һәр ваҡыт уға тартылаҡсаҡ. Ул эше менән мауыҡҡан һәм бай төҫкөбәле кеше.

Римма Абрамовна көлөп, үҙенең тәрбиәләнеүселәре өйткән һүҙҙәр менән уртаҡлаша: «Беҙ һеҙҙе пенсияға оҙатабыҙ ҙа, мәктәпте тамамлағас, клубҡа эшкә йәләсәкбеҙ».

Урҡаҡ осоронда агитбригада ағалары бигерәк актив сығыш яһай. Улар, күмүмән, йыл әйләнәһенә эш алып бара. «Башаҡ» Белем көнөндә, ауыл хужалығы работниктары, малсылар, сәләмәтлек көндәрендә, календарҙа билдәләнгән һәр байрамда сығыш яһамай ҡалмай.

Клуб работниктары 1 сентябрҙә үҙҙәренең тәрбиәләнеүселәрен Белем көнө, уҡыуҙар башланыуы менән ҡотлай, иҫкәлекле бүләктәр таныҡтыра.

Агитбригада йыйырҙаҡ лирик һәм шаян йырҙар, шиғырҙар менән сығыш яһай, таҡмаҡтар йырлана, төрлө бейеүҙәр башҡарыла.

Балалар агитбригадаһының сығышы халыҡ традициялары менән тығыҙ бәйле. Шуға күрә «Башаҡ»ты (әйҙә «Ҡалинка»ны) һәр ерҙә, «Матрай» совхозының бөтә бүлексәләренә лә яҡшы белләр һәм яраталар. Балалар үҙҙәренең сығыштарында иҡмәкте, тыныслыҡты, игенселәрҙе, малсыларҙы хеҙмәтен данлай. Шулай ҙа була, сәнғәт ваҡыйлы балалар көтмәгәндә артта ҡалған комбайнер йәки һауынсы тураһында зәһәрле таҡмаҡ өйтеп ташлайҙар, был бигерәк тә иҡонтоло була.

Агитбригада менән беҙ совхоз бүлексәләренең берәсеңдәге йырҙың таҫуында сығыш алдынан осраштыҡ. Ҡыҙҙар клуб фойеһында ҡотлау һүҙҙәрен, йырҙарҙы, бейеү ҡәрәкәттәрен ҡабатлай, күмүмән, ҡәҙәттәге репетиция бара ине.

Был ҡыҙҙар береһенән-береһе матур, зирәк. Кескәйҙәре өсөнсө, өлкәнерәктәре алтынсы класта уҡый. Баҙаҡлылары, үткер, ныйыуҙары бар. Әммә барыһының ҙа таҡлыҡтары нәҙ киткес саф һәм сағыу. Үҙҙәрен ҡарап, ҡотланып туйғыһыҙ.

Әйе, ҡыҙҙар йылдан-йыл үҫә, ә инде клуб работниктары менән булған уларҙың дуҫлығы мөҙгеләй ҡаласаҡ.

Алысаҡ барған автобустың уларҙың йыры ишетелеп ҡала. Алда ауыл эшсәндәре менән яңы осраныуҙар көтә. Тағы ла күпме ҡыуаныҫлар буласаҡ!

Р. СОЛТАНГИЛДИНА.

ҺҮРӘТТӘ: көсөргәнешле репетициянан һуң, өлөрөттәр менән өҫтәл артында сәй эсеү үҙе ни тора.

Р. ҒӨМӘРОВА фотоһы.

Футбол буйынса „Хеҙмәт байрағы“ район газетаһы һәм „Уҡыш“ стадионы кубогына уйнау тураһында

ПОЛОЖЕНИЕ

Маҡсаты һәм бурыстары: район йәштәре һәм физкультура коллективтары араһында спорттың ошо төрөн популяризациялаштырыу, мөмкин тиклем күберәк ҡатнашыусыларҙы йәлеп итеү, футбол буйынса разрядлы спортсылар әҙерләү һәм иң көслө командаларҙы асыҡлау.

Ярыштарҙы үткәреү ваҡыты һәм урыны: төйгә осрашыуҙар 19 сентябрҙә ҙурҡатыҡтар стадиондарында билдәләнгән исемлекә яраҡлы рәүештә үҙгәрыла: «Степной» — «Маҡан», «Аҡъяр» — «Матрай» совхоздары, «Хәйбулла» совхозы — Аҡъяр (район үҙәге), «Таҡаслыҡ» совхозы — Бүребай рудниҡы командалары. Матчтар сәғәт 4-тә башлана. Ҡайтанан осраныу 20 сентябрҙә дөйөм команда стадионында үҙғарылаҫаҡ. Ике осраныуҙа ла еңеп сыҡҡан команда еңеүсе тип билдәләнә.

Иҫкәрмә: әгәр ике уйында ла еңеүсе асыҡланмаһа, бөхәс 5-әр пенальти менән хәл ителә.

Командаларҙың ярым финал осраныуы 26 сентябрҙә «Уҡыш» стадионында сәғәт 2-нән һәм 4-тән үҙғарыла. Финал уйындары 27 сентябрҙә сәғәт 4-тә, ә өсөнсө һәм дүртенсе урындар өсөн сәғәт 2-лә үткәрелә.

Судьяларҙы профсоюздарҙың ДСО район советы билдәләй.

Беренсе урынды яулаған команда кубок һәм «Хеҙмәт байрағы» район газетаһының Почет грамотаһы менән наградлана. Бөйөк Октябрҙең 70 йыллығына арналған кубок команданы мәңге һаҡлау өсөн бирелә. Икенсе һәм өсөнсө урындарҙы алған командалар Почет грамоталары менән наградлана.

Команданың составы 15 кешенән тора. Өс уйынсыны һәм капитаны алмаштырыу рөхсәт ителә. «Иң яҡшы капитаны», «Иң яҡшы һөжүм итеүсе» һәм «Иң яҡшы ҡаҡсы» тигән призҙар раҫланды.

Заявкалар: командалар вәкилдәре уйнаусы футболсыларҙың исемлеген төҙөй һәм уны уйын алдынан баш арбитрға тапшыра.

Иҫкәрмә: әгәр матч ваҡытында футболсы уйын ҡағыҙҙарен тупаҫ рәүештә боҙһа һәм арбитр тарафынан һары йәки ҡыҙыл карточка күрһәтелһә, ул киләһе уйынға индерелмәй.

Ойоштороу комитеты.

Редакторы
Б. Ғ. НАЗАРҒОЛОВ.

ТЕЛЕВИДЕНИЕ

Шишәмбе, 15 сентябрь

«Орбита-4» — «Восток»

7.00 — «90 минут». 8.35 — Хоккей. 10.35—Документаль фильм. 11.25 — Яңылыҡтар. 15.30 — Яңылыҡтар. 15.40—Үҙғәртеп ҡороу прожекторы. 15.50 — «Һаумы, музыка!». 16.50 — Философик өҙөмәләр. 17.05 — Мультфильм. 17.45 — Беҙҙең баҡса. 18.15 — Бөгөн донъяла. 18.30 — Бөйөк Октябрь социалистик революцияһының 70 йыллығына ҡарата. Совет Молдавияһы. 20.30—Ваҡыт. 21.05—Үҙғәртеп ҡороу прожекторы. 21.15—Автор йырҙары кисәһе. 22.45—Бөгөн донъяла.

«ДУБЛЬ-4»

8.00—Иртәнге гимнастика 8.15—Документаль фильм. 8.35 — 13.20 — уҡыу программалары. 8.55, 9.55—Фәнни-популяр фильмдар. 12.00—«Картина». Нәфис фильм. 1-се серияһы. 13.50 — Һинең ленинсы китапханаң. 14.20—Яңылыҡтар. 16.35 — Документаль фильмдар. 17.40—«Батырҙар эҙенән» (башҡортса). 18.00—«Тыуған моңдар». (башҡортса). 18.30 — Телевизион фильм. 18.50—«Ҡыҡылыҡҡа өҙәрһегеҙме?» (башҡортса). 19.10 — «Башҡортостан» информацион программаһы (башҡортса). 19.30 — Тыныс йоҡо, кескәйҙәр! 19.45 — «Нисек йәшәйһең, балалар йорто?» 20.30—Ваҡыт. 21.05—Үҙғәртеп ҡороу прожекторы. 21.15—«Картина». Нәфис фильм. 2-се серияһы. 22.40—Яңылыҡтар.

Шаршамбы, 16 сентябрь

«Орбита-4» — «Восток»

7.00 — «90 минут». 8.35 — «Һаумы, музыка!» 9.35—Ҡыҫҡа хикәйә антологияһы. 10.05—Мультфильмдар. 10.25—Яңылыҡтар. 15.30—Яңылыҡтар. 15.40 — Үҙғәртеп ҡороу прожекторы. 15.50 — «Тарих дәрестәре». 16.35 — «Вологда кейҙәре». 16.45—Бергә-бергә уйлашайыҡ. 17.30—Әкиәттәр. (башҡортса). 18.00 — Мультфильм. 18.10—«Шиғриәт минуттары». 18.15 — Бөгөн донъяла. 18.30—«Башҡортостан» информацион программаһы (русса). 18.50—«Ярыш киҫе — билдәлелектә». (башҡортса). 19.20—Сәнғәт оҫталары. 20.20—Үҙғәртеп ҡороу прожекторы. 20.30 — Ваҡыт. 21.00—Футбол. 23.00—Бөгөн донъяла.

«ДУБЛЬ-4»

8.00 — Иртәнге гимнастика. 8.15 — Документаль фильм. 8.35—13.35—уҡыу программалары. 11.05—Шахмат мәктәбе. 12.10—«Картина». Нәфис фильм. 2-се серияһы. 14.05 — Яңылыҡтар. 16.40 — Документаль фильм. 17.10—Сибай ҡалаһынан «Гөлдәр» балалар бейеү ансамбле концерты (башҡортса). 17.30 — «Һүҙ артында — эш» 18.00—Бөйөк Октябрҙең 70 йыллығына ҡарата. 18.30—Документаль фильм. 18.45—Концерт. 19.30—Тыныс йоҡо, кескәйҙәр! 19.45 — Фәнни-техник прогресс рычаҡтары. 20.10—Телевизион фильм. 20.20—Үҙғәртеп ҡороу прожекторы. 20.30 — Ваҡыт. 21.00—«Картина» Нәфис фильм. 3-се серияһы. 22.20—Яңылыҡтар.

Кесәҙна, 17 сентябрь

«Орбита-4» — «Восток»

7.00 — 90 минут». 8.35 — «Концерт. 9.10 —Ҡайҙа һеҙ, боҡсолар! 9.45 — Документаль фильмдар. 10.20 — Яңылыҡтар. 15.30—Яңылыҡтар. 15.40—Үҙғәртеп ҡороу прожекторы. 15.50 — Документаль телефильм. 16.20—Концерт. 17.20 — Фотоконкурс 17.25 — Фән һәм тормош. 18.00 — Футбол. 20.30 — Ваҡыт. 21.05—Фильм-спектакль. 22.50 Бөгөн донъяла. 23.05—Донъя һәм йәштәр.

«ДУБЛЬ-4»

8.00 — Иртәнге гимнастика. 8.15—Документаль телефильм. 8.35—11.40—уҡыу программалары. 10.05 — СПТУ уҡыусыларына. 11.00—АБВГДейка. 11.30—Фәнни-популяр фильм. 12.05 — «Картина» Нәфис фильм. 3-се серияһы. 13.55—Яңылыҡтар. 14.05 Кемерово телевидение студияһы программаһы. 16.05 — Документаль фильмдар. 17.10—«Мәктәп фермаһында» (башҡортса). 17.30—Документаль фильм. 17.35 — «Оло юлдың башы». 18.20 — Балалар өсөн фильм. 18.40—Продукция сифаты менән химмәт. 19.00—«Башҡортостан» информацион программаһы (башҡортса). 19.20 — Документаль фильм. 19.30—Тыныс йоҡо, кескәйҙәр! 19.45—«Музыкаль тулҡындар». Флүрә Ноғоманова йырлай (башҡортса). 20.30—Ваҡыт. 21.05—Үҙғәртеп ҡороу прожекторы. 22.15—Телеальманах. 22.15—Яңылыҡтар. 22.20—Баскетбол. 23.00 Концерт. 23.30—Футбол.

Йома, 18 сентябрь

«Орбита-4» — «Восток»

7.00 — «90 минут». 8.35 — Фильм-спектакль. 10.10 —Донъя һәм йәштәр. 10.45 — Концерт. 11.45, 15.30 — Яңылыҡтар. 15.40—Үҙғәртеп ҡороу прожекторы. 15.50 —«Беҙ Булҡан менән» Фильм. 16.55—Документаль фильмдар. 17.25—Рус романсы. 17.50—«Ҙур үҙгәрештәр заманы». (Башҡортса). 18.15 —Бөгөн донъяла. 18.30 —«Үҙгәреш күҙлегенән». 18.40—Документаль-ҡурғәҙмә фильм. 18.50 — Нәфис фильм. «Төштәге һәм өңдәге осоштар». 20.20—Үҙғәртеп ҡороу прожекторы. 20.30—Ваҡыт. 21.00—Проблемалар — әҙәнәеҙҙәр — хәл итеүҙәр». 22.30—Концерт. 23.30—Бөгөн донъяла.

«ДУБЛЬ-4»

8.00—Иртәнге гимнастика. 8.15—Документаль фильм. 8.35—11.40—уҡыу программалары. 11.05—Беҙҙең баҡса. 12.10—«Юғалған экспедиция». Нәфис фильм. 14.45—Яңылыҡтар. 14.55 —«Сванетия». 16.50—Музыкаль фильм. 17.50 —Мультфильмдар. 18.15 —Бөгөн донъяла. 18.30 Пәшлек йырлай һәм бейей. 18.50—«Башҡортостан» информацион программаһы (русса). 19.10 —Документаль фильм. 19.30—Тыныс йоҡо, кескәйҙәр! 19.45—Документаль фильм. 20.20—Үҙғәртеп ҡороу прожекторы. 20.30—Ваҡыт. 21.00 —«Хәүефле сик яныңда». Нәфис фильм. 22.30 —Яңылыҡтар.

ВЕҘҘЕҢ АДРЕС: Аҡъяр ауылы, Сиҙәм проспекты, 37.

Телефондар: редактор—2-11-95, редактор урынбаҫары, яуаплы секретарь—2-15-95, партбүлек—2-13-97, ауыл хужалығы бүлеге һәм радиохәбәрсе—2-14-95, хаттар бүлеге—2-13-95, фотохәбәрсе—2-14-98, типография директоры—2-15-62, цех—2-14-87.

Газета аҙнаһына өс тапҡыр: шишәмбе, кесәҙна, шәмбе көндәрендә башҡорт һәм рус телдәрендә сыға.

Орган Хайбуллинского райкома КПСС и районного Совета народных депутатов БАССР.

Башҡорт АССР-ы Нәшриәт, полиграфия һәм китап сауҙаһы эштәре буйынса дәүләт комитетының Хәйбулла район типографияһы. Тираж 2646. Заказ № 923.